**БАШҠОРТОСТАН ЖУРНАЛИСТАР СОЮЗЫНА 50 ЙЫЛ**

***Рәсих ХАННАНОВ,***
***1958 йылдан СССР Журналистар союзы ағзаһы,***
***«Ҡыҙыл таң» гәзитенең элекке баш мөхәррире***

# Милли матбуғат фронты етәкселәре

*Шул һүҙҙәрҙе яҙҙым да, уйланып ҡалдым. Барыһы ла мине аңларҙармы икән? Ҡайһы берәүҙәрҙә шундай фекер йәшәй: журналист һөнәре еңел, ҡәләм тотоп, мәҡәлә яҙып ҡына, аҡсаны күрәп ала. Был — үтә яңылыш ҡараш! Журналист һөнәре бик ауыр, шуның өҫтөнә ул бик яуаплы ла. Һин һәр һүҙең өсөн закон алдында ла, уҡыусың алдында ла, намыҫың алдында ла яуап бирәһең. Өҫтәүенә, күпселек яҙыусылар гәзит йәки журналдарҙа эшләй, шулай үҙҙәренең матди мөмкинлектәрен күпмелер кимәлдә ҡәнәғәтләндерә. Сөнки ун-ун биш йылға бер китап сығарып, ҡайһы берәүҙәр уйлағанса, тик йөрөп кенә йәшәп булмай. Ике фронтка эшләргә, ә әҙәби әҫәрҙәрҙе төндәрен, һаулығың иҫәбенә ижад итергә тура килә. Бына әле мин үҙебеҙҙең Журналистар союзының етәкселәрен барлап ултырғанда ла шуны күрәм. Бөтәһе лә тиерлек ике фронтта егелеп эшләгәндәр. Хәҙер мин улар тураһында ҡулымдан килгән тиклем тулыраҡ мәғлүмәт биреп үтмәксе булам.*



## Ғилемдар Йыһандар улы Рамазанов

Тәүҙә үк шуны әйтеп үтәйем. СССР Журналистар союзы 1956 йылда төҙөлдө. Бының маҡсаты гәзит-журналдарҙа, радио-телевидение редакцияларында эшләгән ҡәләм оҫталарының ижади көсөн дәүләт бурыстарын үтәүгә булышлыҡ итеүгә йүнәлтеү ине. Быны беҙ, айырыуса ул саҡтағы йәш ҡәләм тибрәтеүселәр, хуплап ҡаршы алдыҡ. Мин флотта хеҙмәт итеп ҡайтып ҡына тора инем, шунда уҡ ғариза яҙып, «матбуғат йортона» киттем. Билдәле, ул ваҡытта ундай йорт юҡ ине, Пушкин һәм Аксаков урамдары мөйөшөндә урынлашҡан бинаға ойошоп алған республика гәзиттәре редакциялары ғына бар ине. Миңә «Совет Башҡортостаны» гәзите мөхәррире янына инергә ҡуштылар. Урта буйлы, мөләйем йөҙлө уҙаман урынынан тороп ҡаршы алды. Ул Ғилемдар ағай Рамазанов булып сыҡты. Мин уға үҙемдең Ҡырмыҫҡалы район гәзитендә эшләй башлауым, Журналистар союзына ағза булып инергә теләүем тураһында әйттем. Ул теләгемде хупланы. «Ошо көндәрҙә беҙҙең редакциянан бер бүлмә бирәсәктәр. Шунда документтар йыя башлайбыҙ», — тип, тағы ла нимәләр кәрәклеген әйтте. Беҙ бына шулай таныштыҡ, һуңынан ғүмер буйына бер һуҡмаҡтан атларбыҙ, тип кем уйлаған. Документтарымды бер аҙ һуңлабыраҡ килтерҙем, шунлыҡтан беренселәр рәтенә эләгә алманым. Беренселәр булып 1957 йылда Союзға ағза булып ингән ун биш кешенән бөгөн Т.И.Ахунйәнов, Р.Н.Ҡотошов һәм Ф.Т.Мөхәмәтйәновтар ғына иҫән-һауҙар.

Ғилемдар ағай һүҙендә торҙо: үҙенең кабинетына ҡаршы ғына бер бүлмәгә Башҡортостан Журналистар союзы урынлашты. Шунда барып, билет алдым. Ул саҡтағы билет та үҙенсәлекле ине. Тышы көрән төҫтә, күндән, «Союз журналистов СССР» тип яҙылған. Икенсе битендә ағза булып инеү ваҡыты күрһәтелгән, фотоһүрәт, мисәт һуғылған. Өсөнсө битендә — ҡабул ителгән ағзаларҙың һаны (минеке — 14509), исем, фамилия... Артабан иғәнә түләү тураһында штамптар һәм ҡултамғалар өсөн биттәр теҙелеп китә. Быларҙың бөтәһен дә раҫлап СССР Журналистар союзы рәйесе П.Сатюков ҡул ҡуйған. Бынан һуң билеттар күп тапҡыр алмашынды, рәүештәре үҙгәртелде, ләкин быныһы, нисектер, күңелгә яҡын булып ҡалған.

Ғилемдар ағай Рамазанов беҙҙең Башҡортостан Журналистар союзы маҡсатҡа йүнәлешле эшләһен өсөн күп көс һалды. Осрашыуҙар, семинарҙар үткәрелде, абруйлы гәзит мөхәррире булараҡ, ул ҡәләм оҫталарын Союзға инергә өндәй ине. Шуға ла Союз йылдан-йыл ишәйә, киңәйә барҙы.

Ҡыҫҡаса уның тормош юлы менән дә таныштырып үтәһе килә. Ғилемдар Рамазанов 1923 йылда Саҡмағош районының Иҫке Балаҡ ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Ете йыллыҡ мәктәптән һуң Дәүләкән педагогия училищеһында белем ала. 1942 йылда фронтҡа китә һәм күп ҡалаларҙы, илдәрҙе азат итеүҙә ҡатнаша, яралана. 1945 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтына уҡырға керә һәм уҡыуын гәзиттә эшләүе менән бергә алып бара. Институттан һуң Бөрө уҡы-

тыусылар институтында һәм педагогия училищеһында уҡыта. 1950—1953 йылдарҙа Мәскәү дәүләт университеты аспирантураһында шөғөлләнеп, кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай һәм Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына ғилми хеҙмәткәр булып эшкә ҡайта. Артабан «Совет Башҡортостаны» гәзитенең баш мөхәррире, Башҡортостан Журналистар союзы рәйесе була, Мәжит Ғафури ижады буйынса докторлыҡ диссертацияһы яҡлай... Шул арала ул илленән артыҡ шиғри һәм ғилми китаптар баҫтырып сығара. СССР Юғары Советы депутаты итеп һайлана. Ордендар менән бүләкләнә, уға Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, «БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре» тигән абруйлы исем бирелә.

Был ҡаҙаныштар бөтәһе лә журналистика хеҙмәте менән бәйләнештә яулана.

## Абдулла Ғиниәт улы Исмәғилов

Абдулла Ғиниәт улын Башҡортостан Журналистар союзына етәксе итеп 1966 йылда һайлап ҡуйҙылар. Ул «Совет Башҡортостаны» гәзите редакцияһында эшләй башлағайны. Ғалим кеше, фән кандидаты. Был осорҙа Союздың эшмәкәрлеге шаҡтай юлға һалынғайны инде. Быға, минең уйымса, 1963 йылда яуаплы сәркәтип булып яҙыусы Фәнил Әсәновтың килеүе лә ыңғай роль уйнаны, тип әйтергә була. Ҡарап тороуға үтә баҫалҡы күренгән, күп һөйләшмәҫ, лирик яҙыусы Фәнил Һаҙи улы тиҙ ваҡыт эсендә яңы рәйескә эште яңыса ҡороп ебәреүҙә ныҡлы терәк булды. Мин ул ваҡыттарҙы бөгөн дә һағынып иҫкә алам. Редакцияларҙа төрлө секциялар эшләй башланы, аҙна һайын тиерлек әҙәби кисәләр үткәрелде. Унда беҙ үҙебеҙҙең шиғырҙарҙы, хикәйәләрҙе, фельетондарҙы уҡыныҡ. Мин үҙем шул ваҡытта фельетон яҙырға ылығып киттем һәм бына хәҙер нисә тиҫтә йыл был шөғөлөмдө дауам итәм, утыҙ йылдан артыҡ «Һәнәк» журналында кәңәшселәр ҡоро ағзаһы булып торам.

Бер үк ваҡытта фотокүргәҙмәләр ойоштороуҙы ла дауам иттек. Ул Ғилемдар ағай ваҡытында, йәғни 1960 йылда уҡ, бер тапҡыр бик ҙур итеп ойошторолғайны. Унда республика халҡына билдәле булған фотоһүрәт оҫталары Әғләм Зараев, Марат Герасимов, Александр Галяшкин, Анатолий Виноградов, Юрий Каплундарҙың ижады шаҡтай тулы кәүҙәләндерелгәйне. Был юҡҡа булманы: һуңынан улар өлгөһөндә әллә күпме фото оҫталары үҫеп сыҡты һәм әле лә һәйбәт эшләйҙәр.

Бер редакцияла эшләмәһәк тә, Абдулла Ғиниәт улы менән миңә, оҙаҡ йылдар журналист-мөхәррирҙәр булараҡ, төрлө ауырлыҡтарҙы күтәрергә, уртаҡ тырышлыҡ менән уларҙы еңеп сығырға насип булды. Ул һүҙендә тора белгән, ярҙамсыл һәм һәйбәт етәкселәргә генә хас ғәҙел ихтыярлы мөхәррир ине.

Абдулла ағай милли кадрҙар әҙерләүгә ҙур иғтибар бирҙе һәм уның тырышлығы һис тә бушҡа булманы. Оҫта журналистар ғына түгел, бынамын тигән яҙыусылар, шағирҙар ҙа үҫеп сыҡты. Уларҙы исемләп

тороуҙың кәрәге юҡ, ҡайһы берҙәре киң танылыу алды. Уның бөтә тормошо, бөтә маҡсаты журналистарға арналды.

Абдулла Ғиниәт улы хаҡлы ялға сыҡҡас та ҡәләмен ташламаны: үҙенең тормош юлы тураһында иҫтәлектәр китабы яҙҙы. Ул бай йөкмәткеле һәм матур тел менән яҙылған. Уны уҡыған һәр кеше үҙенә фәһем ала, бигерәк тә бөгөнгө йәштәр өсөн әһәмиәтле ул.

## Ремель Миргазиан улы Дашкин

Ремель Дашкин 1969 йылдан алып 1976 йылға тиклем Башҡортостан Журналистар союзына етәкселек итте. Ул 1928 йылдың 12 сентябрендә Саҡмағош районының Яңы Балаҡ ауылында донъяға килгән. Ғилемдар ағай Иҫке Балаҡтан булғанлыҡтан, Дашкин рәйес итеп һайланғас, журналистарҙың, шаяртып: «Иҫке Балаҡ менән Яңы Балаҡты бергә текһәң, бер салбар була», — тип көлөшкәндәре хәтерҙә. Ләкин уларҙы бергә ҡушыу мөмкин түгел ине. Ғилемдар ағай үтә сабыр, тыныс кеше булһа, Ремель Миргазиан улы тыштан ҡарағанда ла ҡайнап торған утҡа оҡшаш ине. Эсендәген, кемдең кемлегенә ҡарап тормайынса, күҙенә ҡарап, тура әйтеүсе ҡыйыу мөхәррир ул ваҡытта, моғайын, Дашкин ғына булғандыр. Был ғәҙәт уға йәштән үк, комсомол сафынан тәрбиәләнә. Урта белем алғандан һуң, үҙ ауылында география уҡыта, егерме йәшендә ВЛКСМ-дың Саҡмағош райкомы секретаре итеп һайлана. Бер йылдан артыҡ шунда эшләгәс, урыҫ, башҡорт, татар телдәрен яҡшы белгән, киң эрудициялы егетте комсомол өлкә комитетына пропаганда бүлеге инструкторы итеп үрләтәләр. Бер үк ваҡытта ул гәзиттәргә әүҙем яҙыша. ВЛКСМ Үҙәк Комитеты ҡаршыһындағы комсомол мәктәбенең журналистика бүлеген тамамлай һәм яңы ойошторолған «Ленинсе-Ленинец» гәзитенә мөхәррир итеп тәғәйенләнә. Был осорҙа йәштәр гәзите иң ҡыйыу һәм абруйлы баҫмаға әйләнә. Унда Ғәзим Шафиҡов, Булат Рафиҡов, Марсель Ғафуров кеүек һәр нәмәгә үҙҙәренең принципиаль ҡарашы булған һәм йәштәр тарафынан хуплап ҡаршыланған шәхестәр эшләй ине. Бер юғары кәңәшмәлә: «Был «Ленинец» менән нимә эшләйбеҙ инде, ул хатта Шевчукты ла яҡлай бит», — тип әйткәндәре хәтерҙә. Бына шундай ҡыйыу гәзиттең ҡыйыу мөхәрриренең республика журналистарының етәксеһе булып килеүе, билдәле, беҙҙең өсөн ҡыуаныс булды. Ул беренсе көндән үк Союзға ҡабул итеүгә талапсанлыҡты арттырҙы, ағза итеп ысын мәғәнәһендә үҙ эшенә бирелгән, журналистиканы төп һөнәре итеп һайлаған кешеләрҙе генә ҡабул итеү маҡсат итеп ҡуйылды. Был талап бөгөн дә үҙ көсөн юғалтмаған, тип әйтәһе килә.

Ун туғыҙ йыл «Ҡыҙыл таң» гәзитендә эшләү осоронда ул журналистар кадрҙарын әҙерләүгә ҙур иғтибар бирҙе, бер нисә быуынды тәрбиәләне, үҫтерҙе, сыныҡтырҙы. Төп эшенән киткәс тә, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтайы редакция-нәшриәт бүлегенең баш белгесе вазифаһын башҡарҙы.

## Дауытов Вилләр Йомағол улы

Вилләр Йомағол улы Дауытов 1933 йылда Ишембай районы Юлдаш ауылында тыуған. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай һәм ошонда комсомол комитеты секретары булып эшләй башлай.

Артабан комсомолдың Өлкә комитеты уны яңы сыға башлаған «Башҡортостан пионеры» («Йәншишмә») гәзитенә бүлек мөдире итеп эшкә саҡыра. Редакцияла 10 йыл эшләү осоронда бүлек мөдире, яуаплы сәркәтип, 1965—1970 йылдарҙа баш мөхәррир вазифаларын башҡара. 1971—1973 йылдарҙа «Совет Башҡортостаны» гәзитендә баш мөхәррир урынбаҫары булып эшләй. 1973 йылда КПСС Үҙәк комитеты эргәһендәге юғары партия мәктәбен тамамлаған В.Й.Дауытовты КПСС Өлкә Комитетының пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире урынбаҫары итеп тәғәйенләйҙәр.

1976 йылда уны Телевидение һәм радиотапшырыуҙар буйынса дәүләт комитеты рәйесе итеп күсерәләр. Тап ошо осорҙа (1976—1980 йылдар) Вилләр Йомағол улы Башҡортостан Журналистар союзын да етәкләй. Был йылдарҙа ауыл хәбәрселәренең әүҙемлеге, оҫталығы артыуында уның хеҙмәт өлөшө ҙур. Район, төбәк-ара семинарҙар йыш үткәрелә. Башҡортостан матбуғатында фотохәбәрселәрҙең ролен күтәреүгә лә күп көс һала ул. Өфөлә, башҡа ҡала һәм райондарҙа фотокүргәҙмәләр ойошторола. Тәжрибә уртаҡлашыу өсөн Мәскәүҙән фотожурналистар саҡырыла.

1980 йылда В.Й.Дауытовты БАССР-ҙың мәҙәниәт министры итеп тәғәйенләйҙәр. 1986 йылда уны БАССР Юғары Советы Президиумы Секретары итеп һайлайҙар. 1990 йылда был орган БАССР Юғары Советы Секретариаты итеп үҙгәртелә һәм уның етәксеһе итеп Вилләр Йомағол улын тәғәйенләйҙәр.

Артабан 1991 йылда Юғары Совет эргәһендә редакция-нәшриәт бүлеге төҙөлөп, уны етәкләү В.Й.Дауытовҡа йөкмәтелә. «Ведомости Верховного Совета и Совета Министров БАССР» йыйынтыҡтары ошонда донъя күрә. В.Й.Дауытов 1995 йылдан хаҡлы ялда.

Ул «Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре», «РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы отличнигы» тигән маҡтаулы исемдәргә лайыҡ, бер нисә миҙал менән бүләкләнгән.

## Сәғитов Тәлғәт Ниғмәтулла улы

Сәғитов Тәлғәт Ниғмәтулла улы Башҡортостан Журналистар союзын 1980—1986 йылдарҙа етәкләй.

Тәлғәт Ниғмәтулла улы 1942 йылда Ишембай районының Маҡар ауылында тыуып үҫкән. Маҡар урта мәктәбен, БДУ-ның филология факультетын тамамлай. Хеҙмәт юлын комсомолдың Ишембай район һәм ҡала комитеты секретары булып башлай. 1975—1977 йылдарҙа Башҡортостан Яҙыусылар союзы секретары вазифаһын атҡара.

Артабан уны КПСС-тың Башҡортостан Өлкә комитетына инструктор итеп саҡыралар. 1978—1980 йылдарҙа «Һәнәк» журналының баш мөхәррире була. Һуңынан алты йыл Телевидение һәм радиотапшырыуҙар буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын башҡара һәм тап

ошо йылдарҙа Башҡортостан Журналистар союзын етәкләй. Әүҙем журналист булараҡ, Союз эшмәкәрлеген йәнләндереүгә, ижади тормошон байытыуға үҙ өлөшөн индерә.

1986 йылда Т.Н.Сәғитов Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министры итеп тәғәйенләнә, артабан КПСС-тың Башҡортостан Өлкә комитетында мәҙәниәт һәм идеология эштәре бүлеген етәкләй, 1990—1997 йылдарҙа «Башҡортостан» гәзитенең баш мөхәррире була. 2001—2002 йылдарҙа — «Төрксой» халыҡ-ара ойошмаһының рәйесе.

Тәлғәт Сәғитов — Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.

## Бүләков Динис Мөҙәрис улы

Динис Бүләков, юғарыла әйтеп үткәнемсә, ике фронтҡа эшләүсе яҙыусыларҙың береһе. Ул 1944 йылдың 18 майында Мәләүез районының Арыҫлан ауылында тыуған. Урта мәктәптән һуң колхозда механизатор булып эшләгән, Бәләбәй ауыл хужалығы техникумын тамамлаған, район гәзитендә сынығыу алған. Армиянан һуң «Совет Башҡортостаны» гәзитендә, «Ағиҙел» журналы редакцияһында эшләй, оҙаҡ йылдар «Пионер» журналының баш мөхәррире, Телевидение һәм радиотапшырыуҙар буйынса дәүләт комитеты рәйесе була. 1988—1995 йылдарҙа — Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе. Мәскәүҙә А.М.Горький исемендәге Әҙәбиәт институтын тамамлаған.

Мин был мәғлүмәтте «Писатели земли башкирской» тигән баҫманан алдым. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ни өсөндөр уның 1986 йылдан алып 1988 йылдың декабренә тиклем Башҡортостан Журналистар союзы рәйесе булыуы тураһында бер һүҙ ҙә әйтелмәгән. Ә кәрәк ине. Ул үҙгәртеп ҡороу йылдарының ҡатмарлы осор икәнен хәҙер күптәребеҙ тарих биттәренән генә уҡып белә. Һәр милләттең үҙаңы ҡуҙғалған, азатлыҡҡа юл башы һалынған осорҙоң ауырлыҡтарын иң беренсе булып журналистар үҙ иңдәрендә тойҙо. Союзда буталсыҡ осорҙа дөрөҫ юл һайлау еңел булманы. Беҙ Динис менән дуҫтар булдыҡ һәм был хаҡта аҙ һөйләшмәнек, фекерҙәребеҙ һәр ваҡыт тура килә торғайны, ул ихлас кеше ине.

Динис тураһында күп һөйләргә һәм яҙырға мөмкин. Мин бары бер мөһим ваҡиғаға ғына туҡталам. Бер ваҡыт ул: «Яҙыусылар тураһында хәстәрлек күрелә, уларға маҡтаулы исемдәр ҙә бирелә, ә ниңә журналистарға юҡ? Әйҙә үҙебеҙ булдырайыҡ», — тине.

Беҙ был фекерҙе күтәреп алдыҡ.

Төрлө тәҡдимдәр әйтелде. Ахырҙа Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия булдырырға кәрәк, тигән дөйөм ҡарарға килдек. Шунда уҡ «Сельская жизнь» гәзитенең Башҡортостан буйынса үҙ хәбәрсеһе Виктор Семенович Орловты — комиссия рәйесе, уның урынбаҫары итеп мине һайлап ҡуйҙылар. Ни өсөн урыҫ кешеһе рәйес итеп һайланды, тиһәләр, аңлатам: Виктор Семенович урыҫса ла, башҡортса ла, татарса ла, сыуашса ла яҡшы белә. Яҙмалар төрлө телдә килһә, рәйес уларҙы шул килеш уҡый алыр, тигән уй еңде. Миңә премияның положениеһын яҙыу бурысын йөкмәттеләр. Шулай итеп, журналистар өсөн

премия барлыҡҡа килде. Йыллыҡ өс премия профессиональ журналистарға иң яҡшы публицистик әҫәрҙәре, телевизион һәм радио тапшырыуҙары, фоторепортаждар шәлкеме өсөн бирелергә тейеш ине. Тәүге премияларҙы Матбуғат йортонда 1989 йылдың 9 октябрендә, йәғни Шәһит Хоҙайбирҙиндың тыуған көнөндә, уның ҡатыны Маһруй апай һәм ҡыҙы Тамара Хоҙайбирҙиналар Марсель Ҡотлоғәлләмовҡа, «Советская Башкирия» гәзите журналистары Анатолий Козлов, Алик Шакиров, Виктор Шмаковтарға тапшырҙылар.

Динис беҙҙең аранан бик иртә китеп барҙы, минең күңелемдә ул, ауылының аҡ өйҙәре кеүек, аҡ күңелле шәхес булып ҡалды.

## Хажиев Ризван Закирхан улы

Ризван Хажиев — ябай журналистар араһынан һайланған тәүге рәйес. Журналистикалағы ижад юлын ул Мәсетле районының «Коммунистик» гәзитендә әҙәби хеҙмәткәр булып башлай. Артабан мөхәррир урынбаҫары, «Совет Башҡортостаны»ның үҙ хәбәрсеһе, партия тормошо бүлеге мөдире булып эшләй. Динис Бүләковтың тәҡдиме менән 1987 йылда — идара сәркәтибе, ә бер йылдан Журналистар союзы рәйесе итеп һайлана. 1990 йылда БАССР Юғары Советына һайлауҙар ваҡытында депутат итеп һайланды. Талапсан, тура һүҙле шәхес булып хәтергә һеңгән ул.

СССР тарҡалыу менән СССР Журналистар союзы ла бөтөүгә юл тотто һәм уға буйһонған союз һәм берекмәләр үҙ көндәрен үҙҙәре күреүгә күсте. Быны өсөн иң тәүҙә үҙебеҙҙең Уставты эшләргә кәрәк ине. Уны ла миңә яҙырға тура килде һәм байтаҡ төҙәтмәләр, үҙгәрештәр менән пленумдарҙың береһендә ҡабул итеп, Башҡортостан Республикаһының Юстиция министрлығында теркәнек. Ризван Хажиевтың юллауы буйынса Союзды республика бюджетына алдылар һәм штатҡа 4 берәмек бирелде. Еңел автомобиль бүленде. Әлегә тиклем ундай льгота менән Яҙыусылар союзы ғына файҙалана ине. Союз рәйесе вазифаһы ла йәмәғәт башланғысынан штатлы вазифаға күсерелде. Ошо ауыр һәм болғауыр осорҙа ҡайһы бер республика, край һәм өлкәләрҙә журналистар союздары тарҡала, төрлө ассоциация, лигаларға ойоша башлаһа ла, беҙҙә уға юл ҡуйылманы.

Президентыбыҙ һәм Хөкүмәт яғынан журналистарға иғтибар артҡан һайын, ижади әүҙемлеккә лә киң юл асылды, Журналистар союзының тәүге ойошмалары һәм берекмәләренең эше йәнләнде. Союз пленумдарын Өфөлә генә түгел, бәлки күсмә рәүештә үткәреү ғәмәлгә инде. Хәтеремдә, шундай пленумдарҙың береһе Ағиҙел буйлап Бөрөгә барышлай теплоходта, икенсеһе Ҡариҙел районының пионер лагерында, йылға буйында, үткәрелде.

## Сәлимов Марсель Шәйнур улы

Журналистар союзы менән етәкселек иткән осорҙа (1996—2006 йылдар) уның эшмәкәрлеге тағы ла бер баҫҡысҡа күтәрелде. «Һәнәк» журналының баш мөхәррире, яҙыусы Марсель Шәйнур улы эште үҙенсә

юмор, шаян көлкө менән алып китте. Иң беренсе булып Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияға хөкүмәт статусы биреүҙе юллап алды һәм хәҙер ул «Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһы» тип атала. Ул йыл һайын Шәһит Хоҙайбирҙиндың тыуған ауылы — Күгәрсен районының Хоҙайбирҙин (элекке Бесәнсе) ауылында тапшырыла. Премия күләме лә байтаҡ артты.

Быңдай шарттарҙа, әлбиттә, эшләргә лә эшләргә кәрәк ине. Ул йылдарҙа башҡарылған сараларҙы һанап китһәң, бик оҙонға һуҙылыр. Шуға ла үҙем мөһим тип һанаған ҡайһы бер миҫалға ғына туҡталып китәм.

Беренсенән, союзға инеүселәрҙең һаны артты һәм бөгөн улар меңдән ашҡан. Тимәк, Журналистар союзының абруйы күтәрелә тигән һүҙ. Былтыр ғына, мәҫәлән, 98 кеше союзға ҡабул ителде. Шуныһы шатлыҡлы: союзға йәштәр күпләп ағыла. Икенсенән, рәйес һәм идара тырышлығы менән һәр редакция эргәһендә лә союздың башланғыс ойошмалары булдырылды. Улар урындағы журналистарҙың әүҙемлеген хөкүмәтебеҙ ҡуйған бурыстарҙы үтәүгә йүнәлтә. Тағы ла бер яңылыҡ: әгәр элек союзға инергә теләүселәрҙе Журналистар союзы идараһы ҡабул итһә, хәҙер ул эш башланғыс ойошмаларға йөкмәтелде, ә идара иһә ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы раҫлай ғына. Башланғыс ойошманың ҡарары менән килешмәгәндәр туранан-тура союз идараһына мөрәжәғәт итә ала.

***

Һәр эштә уңыш тырышлыҡ һалмайынса, көс түкмәйенсә яуланмай, бер нәмә лә күктән төшмәй. Союз рәйесенең штатлы вазифаһы, Ризван Хажиев киткәс, йәнә йәмәғәт башланғысына күсте. Был дөрөҫмө-түгелме — ваҡыт күрһәтер. Хәҙер союз эсендәге бөтә эш аҙ ғына хеҙмәт хаҡы алып эшләүсе яуаплы сәркәтип менән бухгалтер елкәһенә төшә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, унда журналистикаға йәнетәне менән бирелгән, союз өсөн янып-көйгән кешеләр эшләй. Журналистар союзы ойошторолғандың тәүге йылдарында идара сәркәтибе вазифаһын Фәнил Әсәнов башҡарҙы. Уны үткер ҡәләмле журналист Давид Гальперин алмаштырҙы һәм егерме йыл буйы союз йөгөн тартты, байтаҡ яңылыҡтар индерҙе. Әлмира Саҡаева ла Журналистар союзы өсөн байтаҡ эш башҡарырға өлгөрҙө. Вил Мәксүтов тә идара сәркәтибе булып оҙаҡ эшләне. Һуңғы йылдарҙа был вазифаны Валентина Назарова атҡарҙы.

Йомғаҡлап шуны әйтмәксемен: Башҡортостан Журналистар союзының абруйы республикала ғына түгел, бәлки СССР, аҙаҡ Рәсәй журналистар берекмәләре араһында ла киң билдәле. Ҡағиҙә буларак, уның рәйестәре, башҡаларҙан айырмалы рәүештә, СССР, аҙаҡ Рәсәй Журналистар союздарының идара, ә айырым берекмәләр рәйестәре ревизия комиссиялары ағзалары итеп һайлана килде. Ҡайһы бер рәйестәребеҙ хатта (Р.Хажиев, мәҫәлән) Рәсәй Журналистар союзы съездарын алып барҙы. Был традиция киләсәктә лә дауам итер, Башҡортостан Журналистар союзы үҙенең данын яңы бейеклектәргә күтәрер, тип ышанғы килә.

# «Золотая» летопись Союза

14 июня — День работников средств массовой информации и печати — в этом году совпал со знаменательной датой — 50-летним юбилеем Союза журналистов Республики Башкортостан. На мероприятие собрались представители республиканских, городских, районных и объединенных изданий, ветераны журналистики, лауреаты премии Правительства РБ имени Ш.Худайбердина, творческая интеллигенция республики.

Торжества начались с церемонии возложения цветов к памятнику видного государственного и общественного деятеля, талантливого башкирского писателя и публициста Ш.Худайбердина у Дома печати. С именем Шагита Худайбердина связано многое в истории республики и, в частности, башкирской журналистики. В честь Шагита Ахметовича учреждена журналистская премия, которой ежегодно награждаются лучшие профессионалы, «золотые перья» Башкортостана. Среди представителей республиканских СМИ 63 журналиста удостоены этой престижной премии.

С краткой речью на митинге выступил начальник Управления по делам печати, издательства и полиграфии при Правительстве РБ Б.Н.Мелкоедов. Отметив, что нынешний День печати совпал с 50-летием Союза журналистов РБ и 90-летием газеты «Башкортостан», Борис Николаевич в заключение сказал: «Мы можем гордиться тем, что наши журналисты чтят память Шагита Худайбердина и продолжают его дело».

Председатель Союза журналистов Республики Башкортостан Ф.В.Ахмадиев, поздравляя коллег с профессиональным праздником, кратко остановился на наиболее важных проблемах современной башкирской журналистики.

После коллективного фотографирования у памятника Ш.Худайбердину участники отправились на торжественное открытие Дома башкирской книги, расположенного в помещении Уфимского полиграфкомбината. Здесь будут продаваться книги, выпускаемые издательством «Китап» и другими республиканскими издательствами.



Праздник продолжился в Башкирском государственном академическом театре драмы имени Мажита Гафури. Главный государственный советник Президента РБ Фаукат Хамидуллович Кидрасов, поздравляя всех собравшихся в зале журналистов, заметил, что средства массовой информации вносят весомый вклад во все достижения нашей республики и выполняют огромную роль в становлении гражданского общества.

Гость из Москвы — советник председателя Союза журналистов России Герман Кашафович Валиев в своем выступлении отметил, что журналисты Башкортостана принимают самое активное участие во всех мероприятиях, акциях, конкурсах общероссийского уровня. Союзу журналистов РБ гость вручил подарок — вазу гжельских мастеров. За высокий профессионализм, многолетнюю творческую деятельность в печати Почетные грамоты Союза журналистов России из рук Германа Валиева в этот день получили бывший редактор газеты «Путь Октября» города Мелеуза Лариса Михляева, заместитель редактора газеты «Стерлитамакский рабочий» Людмила Никитина, сотрудник газеты «Янаульские зори» Альбира Хатмуллина. Ряд журналистов был награжден Почетными грамотами Управления по делам печати, издательства и полиграфии при Правительстве РБ.

— Союз журналистов республики всегда уделял должное внимание профессиональному росту и подготовке кадров, нравственному воспитанию подрастающей смены, — сказал в своем выступлении председатель Союза журналистов РБ Ф.В.Ахмадиев. — Ценный опыт ветеранов журналистики востребован и в наши дни. Любовь к Родине, чувство ответственности, желание своим каждодневным трудом улучшать жизнь наших сограждан отличают лучших мастеров слова.

Не были обойдены вниманием и молодые журналисты — в торжественной обстановке Фарит Вафиевич вручил студентке 4 курса БГУ Мадине Хусаиновой и корреспонденту газеты «Истоки» Айвазу Галяутдинову удостоверения Союза журналистов РБ и РФ.

От имени ветеранов выступил бывший председатель Союза журналистов РБ, лауреат премии имени Ш.Худайбердина Ризван Хажиев, который отметил, что наш Союз — лучший и по количеству, и по качеству.

Ярким завершающим аккордом праздника стал концерт мастеров искусства республики. Своим талантом журналистов порадовали Азат Бикчурин, Вахит Хызыров, Райля Азнакаева, Азамат Гафаров, Нурия Ирсаева, Рафаэль Рахматуллин, Гульшат Гайсина, Венер Камалов, искрометные танцы подарил фольклорный ансамбль танца «Мирас».

Глубоко символичен тот факт, что 50-летний юбилей Союза журналистов РБ совпал с главным событием года — 450-летием добровольного вхождения Башкирии в состав России, которое широко отражается в средствах массовой информации. Журналисты республики активно освещают социальные и экономические преобразования, происходящие в республике, способствуют укреплению межнационального согласия и доверия, развитию духовной сферы. Богатый многолетний опыт, накопленный ветеранами журналистики, передается молодому поколению, а это значит, что славные традиции отечественной журналистики будут продолжены.

Руководство Союза журналистов РБ благодарит все первичные журналистские организации, а также спонсоров — компанию «Мегафон» (директор В.Тураев), ОАО «Цветы Башкирии» (В.Шерышев) за помощь в организации и проведении мероприятия.

*Раиля ШАКУРОВА.*